*Миләүшә МӨХӘМӘТЙӘНОВА*

# ФӘРИҘӘ ЛИМОНДАРЫ

Әфлисун, мандарин, инжир, гранат, барбарис, лавр... һәм күп, бик күп лимон ағастары... Һүҙем ниндәйҙер йылы субтропик климатлы илдәр хаҡында түгел, ә беҙҙең республикала, ҡырыҫ тәбиғәтле Көньяҡ Уралда, Башҡортостандың башҡалаһы Өфөлә, тағы ла асығыраҡ итеп әйткәндә, «Зеленая роща» биҫтәһендә урынлашҡан ғәжәйеп бер баҡса тураһында. Өфө урман хужалығы техникумының уҡыу-тәжрибә хужалығы тип атала ул. Бындағы теплицаға килеп инеү менән, ожмах баҡсаһына эләктем микән әллә, тип уйланым мин. Йылтырап торған, шыма, ҡуйы йәшел төҫлө япраҡтар араһынан ап-аҡ лимон сәскәләре бағ, һауа шуларҙың хуш еҫе менән тулған. Һәр ҡыуаҡта ҡуш йоҙроҡ саҡлы бихисап һап-һары һәм йәшел лимон емештәре аҫылынып тора. Ағас төптәрендә, һуҡмаҡтар буйлап мин быласа күрмәгән ғәжәйеп гөл ҡыуаҡтары аллы-гөллө сәскә атып ултыра...

Ҡала үҙәгендәге был мөғжизә утрауының хужабикәһе—уҡыу-тәжрибә хужалығының етәксеһе, биология фәндәре кандидаты Фәриҙә Вәли ҡыҙы Садиҡованы ошо гөлдәр араһында осраттым. Уның мөләйем йөҙө ошо күркәм мөхиткә килешеп торғандай. Тап ошо ҡатындың тырыш хеҙмәте һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән был лимонарий. Фәриҙә Вәли ҡыҙы ошо ағастарҙы илдең төрлө мөйөштәренән һайлап алып ҡайтып ултыртҡан. Бына ун йыл инде, ошо хужалыҡ уның тормошоноң айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әйләнгән. Барса күңел йылыһын биреп, бала баҡҡандай тәрбиләп үҫтерә бит ул лимондарын. Шуға ла үҙ балаһындай ярата ул уларҙы.

Фәриҙә ханым, ғөмүмән, бөтә тәбиғәткә, тереклек донъяһына ғашиҡ кеше. Был сифаттар уға ата-әсәһенән күскәндер, моғайын. Урмансы ҡыҙы бит ул. Атаһы, Вәлиулла Сәлим улы Садиҡов, йәш сағында офицер булып хеҙмәт иткән, һуңынан урмансы булып киткән. Кескәй Фәриҙәне йыш ҡына үҙе менән урманға алып йөрөткән, ағастар, үҫемлектәр донъяһы тураһында, уларҙың нисек үҫеүе, сәскә атыуы, емеш биреүе тураһында ҡыҙына һөйләр булған. Әсәһе,тарих уҡытыусыһы һәм мәктәп директоры вазифаларын башҡарыуына ҡарамаҫтан, үҙ баҡсаларында йәшелсә-емеш үҫтереү менән мауыҡҡан. Шул саҡта Фәриҙә лә үҙенә бүлеп бирелгән түтәлдә сәскәләр үҫтергән. Бына шулай, сикһеҙ дала бөҙрә түбәле тауҙар менән ҡушылған ерҙә—хозур тәбиғәтле Ейәнсурала бөрөләнгән урмансы менән уҡытыусы ҡыҙының тәбиғәт донъяһына һөйөүе.

Ҡыҙыҡайға ун бер йәш тулғанда ғаиләләре Өфөгә күсеп килә. Мәктәпте тамамлағас, Фәриҙә «Кем булырға?» тип икеләнеп тормай, туп-тура Башҡорт дәүләт университетының биология факультетына уҡырға инә, ботаника фәнен төплө өйрәнә. Уҡыуын тамамлағас, Урман хужалығы министрлығының лабораторияһында тупраҡты өйрәнеүсе агрохимик булып эшләй башлай. Ошо дәүерҙә республиканың күп кенә урман хужалыҡтарын, питомниктарҙы йөрөп сыға. Был хеҙмәттең һөҙөмтәһе — Воронеж ҡалаһында кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлау.

Һикһәненсе йылдар уртаһында Башҡортостан Урман хужалығы министрлығы теплицалар төҙөү эшен йәйелдерә. Садиҡоваға ябыҡ грунтта лимон үҫтереү ысулдарын өйрәнеүҙе тапшыралар. Был яуаплы эштә тәжрибә туплау өсөн йәш ғалимә Ташкентҡа, оҙаҡ йылдар цитрус үҫемлектәр үҫтереү менән шөғөлләнгән ғалим, почетлы академик Зәйнетдин Фәхретдинов янына юллана. Тәүҙә ғалим лимон үҫтереү серҙәрен тиҙ генә асып һалырға ашыҡмай, «Күп килделәр инде Рәсәйҙән, ә һин, һеңлем, үҙ ҡулдарың менән эшләп ҡара, бәлки, булдырырһың», ти. Шулай ҙа, бер ай үткәс, талапсан ғалим ныҡыш башҡорт

ҡыҙына егермеләп төп лимон үҫентеһе биреп ҡайтара. Ошо «юбилейный» һәм «ташкентский» тигән сортлы лимон үҫентеләре бәләкәй генә теплицаға ултыртыла. Тейешле тәрбиә алғас, лимон ағастары тиҙ арала емеш бирә башлай.



1990 йылдың октябрендә тағы ла меңләп үҫенте алып ҡайталар.

— 11 октябрь көндө ағастар алып Үзбәкстандан ҡайтып киләбеҙ. Башҡортостан суверенлы республика булды, тип радионан иғлан иткәйнеләр, беҙ, үзбәктәрҙе аптыратып, шатлыҡтан ҡысҡырып көлөшә, ҡул саба башланыҡ, — тип хәтерләй ул саҡтарҙы Фәриҙә Вәли ҡыҙы.

Яңы Башҡортостан Республикаһының «тиңдәштәре» — ошо лимон ағастары өсөн бер гектар майҙанда теплица төҙөп, һәр бер үҫентене ҡәҙерләп үҫтерә башлайҙар. Ят тупраҡҡа күсерелгән наҙлы үҫемлек Садиҡованы байтаҡ көс түгергә, хафаланырға мәжбүр итә ул саҡта. Әммә тырышлыҡ бушҡа китмәй — икенсе йылға лимон ағастары емеш бирә башлай. Теплица коллективы, бигерәк тә уның етәксеһе өсөн ҙур еңеү була был. Бәктиһәң, беҙҙең тәбиғәт шарттарында ла лимон кеүек йылы яратҡан, наҙлы үҫемлектәрҙе үҫтереп була икән! Халыҡтың «Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан» тигәне хаҡ икән.

Цитрус үҫемлектәр үрсетеү буйынса махсуслашҡан Өфөләге был теплица Үҙәк Рәсәйгә бёрәү. Әлеге көндә бында барлығы 1255 төп емеш биргән лимон ағасы бар. Һәр бер үҫентене ҡәҙерләп үҫтерәләр: тәмәке саңы һәм һабын ҡатнашмаһы ярҙамында ҡоротҡостарҙан һаҡлайҙар, тәбиғи ашламалар ҡулланалар.

Лимондан тыш, цитрон, апельсин, лавр, гранат, инжир, фейхоа кеүек экзотик үҫемлектәрҙе лә үҫтереп ҡарайҙар теплицала. Халыҡҡа үҫентеләр һаталар. Өйөндә экзотик үҫемлек үҫтереп ҡарарға теләүселәр күп бит ул.

Лимон—оҙон ғүмерле үҫемлек, йөҙәр йыл йәшәй, иң уңдырышлы ваҡыты 20 йәшендә була икән. Ә әлегә бында йыл һайын 15 тонналап уңыш йыйып алалар. «Юбилейный» сортлыһының емеше тос — уртаса 250 грамм ауырлыҡта. Ә бер йылды хатта бер килограмм 800 грамлыҡ лимон үҫтереп алғандар. «Ташкентский» сортлыһыныҡы иһә 120 грамдан артмай, үҙенсәлекле тәме менән айырыла. Цитрус емештәренең һаулыҡ өсөн нисек файҙалы булыуы һәр кемгә мәғлүм.

Лимонарий эсендә йыһазландырылған уҡыу класында Фәриҙә Вәлиевна Өфө Урман хужалығы техникумы студенттарына теплица эше һәм экология буйынса дәрестәр үткәрә. Лимонарий студенттар өсөн яҡшы практик база.

—Мәшәҡәттәр, пландар етерлек. Тик бына ғилми эш менән шөғөлләнергә, беҙҙең тәбиғәткә яраҡлашҡан яңы сорттар уйлап табыу өстөндә эшләргә шарттар етешмәй. Теплицаға яңы ҡорамалдар, йыһаздар кәрәк, йылытыу ҡаҙандары ла иҫкергән, — ти хәстәрлекле лимонарий хужаһы.

Бына шулай, үҙ эшенә бөтә күңелен һалып, дәртләнеп эшләй Фәриҙә Садиҡова. Яратҡан эшенән башҡа, һөйөклө ҡыҙы — Ләйсәне бар. Аҡыллы, тырыш ҡыҙ. Башҡорт дәүләт университетының сит телдәр факультетында уҡып йөрөй, тарих, әҙәбиәт менән мауыға.

Лимонарийға йыш ҡына студенттар, уҡыусылар экскурсияға килә. Ҡыҙыҡһыналар, һуңынан хаттар яҙалар. Ҡайһылары Фәриҙә Вәлиевнаға шиғыр ҙа яҙып ебәрә. Бала күңелендә хисле шиғыр юлдары тыуҙырырлыҡ матурлыҡ, мөғжизә утрауҙары күберәк булһын ине, ошо мөғжизәле гүзәллекте булдырыусы, уны бөтә күңеле менән яратыусы, һаҡлаусылар, Фәриҙә Вәли ҡыҙы Садиҡова кеүек эшһөйәр, гүзәл ҡатын-ҡыҙҙары күберәк булһын ине халҡымдың, тип уйланым мин тирә-яғы сәскәләргә күмелгән лимонарий һуҡмаҡтары буйлап атлағанда.